Мифтахетдин Аҡмулланың тыуыуына — 175 йыл

*Зәйтүнә ШӘРИПОВА,*
*филология фәндәре докторы*

# Әҙәби фекеребеҙ үҫешендә Аҡмулла ижадының әһәмиәте

## ”Ғилемлек — даръялыр, әгәр...”

Дини схоластикаға, фекер торғонлоғона ҡаршы хеҙмәттәр яҙған дин реформаторы, шулай уҡ рус фәне менән тығыҙ бәйләнештә формалашҡан тарихсы, этнограф Мәржәниҙе Тимерҡаҙыҡ тип күктәргә күтәреп маҡтаған Аҡмулла диндән тамырланған икенсе йүнәлешкә — суфыйсылыҡҡа, суфыйҙарға нисек ҡараған? Тәү ҡарашҡа был һорау бигүк аныҡ түгел һәм урынһыҙыраҡ һымаҡ. Аҡмулланың идея-эстетик ҡараштарын билдәләгәндә, ниңә суфыйсылыҡ идеологияһы ғына күҙ уңында тотола? Үҙенең остазы тип иҫәпләгән Ш.Зәкиҙең, ҡәләмдәше Ғ.Соҡоройҙоң, ғүмерлек дуҫы һәм фекерҙәше шәйех Зәйнулланың суфыйсыл ҡараштары унын аңында берәй төрлө һиҙелерлек эҙ ҡалдырғанмы, юҡмы, әллә, Ғ.Шафиҡов яҙғанса, ”еще в отрочестве, когда он постигал азы поэзии и не мог воспринимать аскетически сухие, безжизненно-мистические стихи учителя своего Ш.Заки и прочих поэтов-суфистов, интуиция подсказала ему иную дорогу в мире поэзии”.[1] Аҡмулланың шиғриәтен дөрөҫ интерпретациялау өсөн унын ижад позицияһын был юҫыҡта ла күҙҙән үткәреү үтә мөһим мәсьәлә булып тора.

Ижады башҡорт шиғриәтенең артабанғы үҫешендә поэтик традициялар тыуҙырыуын да иҫәпкә алғанда, Аҡмулланың идея-эстетик ҡараштарын өйрәнеүҙең әһәмиәте нығыраҡ күтәрелә һәм аңлашыла. Шағирҙың мираҫын барлап һәм нәшриәткә әҙерләп, туранан-тура әҫәрҙәре менән эш иткән Ә.Х.Вилданов ”Аҡмулла ижадын өйрәнгәндә, уға тәьҫир иткән сығанаҡтарҙы тикшергәндә, Аҡмулланы Аҡмулла иткән, уны туғандаш халыҡтар әҙәбиәттәре үҫешенә ғәйәт ҙур йоғонто яһарлыҡ классик шағир итеп күтәргән үҙенсәлектәрҙе дөрөҫ тотоп алыу” кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә ала. Шул үҙенсәлектәрҙе барлыҡҡа килтереүҙә, ғалим фекеренсә, өс фактор ҙур роль уйнай. Шағирҙың тормош юлын шул заман Рәсәй ысынбарлығы билдәләһә, әҫәрҙәренең йөкмәткеһе һәм идея йүнәлеше, ғөмүмән, бар булмышы менән башҡорт, ҡаҙаҡ халыҡтарының бай ауыҙ-тел ижады традициялары менән һутланып үҫә. ”Аҡмулланың шағир буларак

*Аҙағы. Башы 5-се һанда*

үҫешендә, поэтик талантының баҙыҡланыуында шул осорҙа Башҡортостанда киң таралған суфыйсылыҡ поэзияһының йоғонтоһо шаҡтай, — тип яҙа Ә.Вилданов. — Шулай ҙа Аҡмулла шиғриәте Көнсығыш поэзияһының, суфыйҙар ижадының күберәк формаль яғын үҙләштергән...”

Аҡмулла ижадына суфыйсылыҡ әҙәбиәте традициялары ни дәрәжәлә йоғонто яһағанын асыҡлау өсөн уны уҡытҡан һәм үҙе остаз тип атаған заттарҙың исем-шәрифтәрен иҫкә төшөрөү ҙә етә. Стәрлебаш мәҙрәсәһендә атаҡлы суфый шағир Ш.Зәки менән шиғриәт майҙанында тығыҙ аралашҡандарын, ә Троицкиҙа атаҡлы суфый-ғалим З.Рәсүлиҙең бик яҡын кешеһе булғанлығын иҫәпкә алғанда, Аҡмулланың тасауыф тәғлимәте менән яҡындан таныш булыуы бер ниндәй бәхәс тыуҙырмай.

Академик Ғ.Хөсәйеновтың ”Шәйех Зәйнулла хәҙрәт” портретында һәм ”Суфизм һәм суфыйсылыҡ әҙәбиәте” мәҡәләһендә XIV быуаттың атаҡлы Урта Азия суфыйы Мөхәммәт Фазыл әл-Бохари әл-Нәҡшбәнди нигеҙләгән тәриҡәттең йәсәүийә тәриҡәтенән айырмаһы ентекле һүрәтләнә. Әгәр ҙә Йәсәүи донъянан ваз кисеү, пессимизм һәм мистикаға күберәк иғтибар бүлһә, Нәҡшбәнди тәриҡәтендә, киреһенсә, донъяуилыҡ, йәшәү оптимизмы раҫлана. Нәҡшбәндиә ”хилүәт (яңғыҙлыҡ) һәм йәмәғәт (күмәклек), сәфәр һәм ватан, ҡараш һәм аҙым, хуш вә мәл” тип аталған бинар дүрт принципҡа нигеҙләнә. Ғ.Хөсәйенов уларҙың мәғәнәһен түбәндәгесә аңлата:

1) яңғыҙлыҡ һәм күмәклек тигәне — кешенең күмәк кешеләр менән йәмәғәт эсендә йәшәүе; 2) сәфәр һәм ватан тигәне — ил-йорт араһында сәфәр ҡылып, донъя күреү, яҡшыһын-яманын, өлгөләһен ҡарап, фәһем алыу һ.б.; 3) ҡараш һәм аҙым тигәне — һәр аҙымды уйлап баҫыу, һәр аҙымдың үҫешкә хеҙмәт итеүе, уңыш һәм ҡыуаныс өсөн яһалыуы; 4) хуш һәм мәл тигәне — донъя ләззәттәренең тәмен һәм ҡәҙерен белеп, тейешенсә файҙаланып ҡалырға тейешлеге, сөнки һәр нәмәнең ваҡыты сиклелер.

Дөйөмләштереп әйткәндә, нәҡшбәндиә кешенең һаулығын һаҡлау, тән һәм йән сафлығы, намыҫлы йәшәү, шәхес, выждан ирке, аҡыл һәм тәжрибә менән әҙәмсә ғүмер һөрөү кеүек әҙәп-әхлаҡ, хоҡуҡ, бурыс мәсьәләләрен гуманистик нигеҙҙә хәл итә. Шәхестең рухи азатлығын таныуы, һәр берәүгә үҙенең ижади һәләттәрен тормошҡа ашырыуға тулы ирек ҡуйыуы Нәҡшбәнди тәриҡәтен халыҡҡа аңлайышлы, бер үк ваҡытта мәғәнәле иткән. Әйтергә кәрәк, был тәриҡәттең таралыуы Зәйнулла хәҙрәт эшмәкәрлегенә генә бәйле түгел. Алда һаналып үткән уҡымышлы мөдәррисәрҙең күбеһе — тап нәҡшбәндилек идеялары менән илһамланып, суфыйсылыҡ юлынан барған заттар.

Аҡмулланың тормош юлына ҡағылышлы барлыҡ мәғлүмәттәрҙе туплап, уны күреп-ишетеп белгән кешеләрҙең хәтирәләрен йыйып, биографияһын тулы итеп өйрәнеү юлында күп көс түккән Д.Ҡаскынбаев яҙыуынса, Аҡмулла фарсы телен яҡшы белеүенә ғорурланып, һәр саҡ үҙе менән Аллаяр суфыйҙың ”Мәсләк әл-муттакин”, ”Морад әл-ғарифин”, ”Ҫөбәт әл-ғажизин” китаптарын йөрөтөр[2] һәм йыш ҡына уларҙы уҡыр булған. Был хаҡта ул Нурғәли хәҙрәткә яҙған асыҡ хатында түбәндәгесә хәбәр итә.

Тирә-яғым китаптан мәхрүм түгел,  
Ултырған урыным — бер ҡаҙ ояһы.  
Ҡуйғанмын төрлө китап ҡаршы өйөп,  
Ҡараймын фарсымдан башым эйеп...

Аҡмулла мәҙрәсәләрҙә өйрәнелгән традицион сығанаҡтарҙы ("Ғаҡаид", "Шәмсиә", "Мулла Жәләл", "Киҫекбаш", "Ахыры заман" һ.б.) белеүҙе тәрән һәм күп яҡлы ғилемлелеккә һанамай:

"Ғаҡаид" уҡыным, тип ҡаҡаймаһын...
"Шәмсиә"нән биш-алты ауыҙ нәмә ятлап,
Аталыр наҙандарға дана мулла...

Унынса, Әфләтун, Ғаззали, Әлишер Науаи, Мөғәллим Ҫәни (әл-Фараби), Ерәнсә сәсән кеүектәр — ғилем дә, дин дә, әҙәп тә, фекер һәм һүҙ тослоғо ла, кешелеклелек өлгөһө лә. "Әфләтун — донъя зирәклеге", "Фараби — мөғәллим әҫ-ҫәни", "Ғаззали — ғилемдә әһле тәхҡиҡ (хаҡлыҡ эҙләүсе)", "Ғәлишир — арыҫландай", "Ерәнсә — телгә сәсән", "Мәржәни — ул Тимерҡаҙыҡ", "хөрмәтле Ризаитдин — бер камил зат", "Троицки мөдәрристәр — холҡо саф фазылдарҙан", "Курса хәҙрәт — мәдехкә лайыҡ бер ғалим" тип, һәр бер затҡа ҡыҫҡаса, әммә бик аныҡ характеристика бирә шағир. Тимәк, эшмәкәрлектәре һәм ижадтары буйынса тейешле мәғлүмәттәргә эйә булып, улар тураһында Аҡмулла үҙ фекерен туплаған, тип раҫларға урын бар. Һәр хәлдә, байтаҡ шиғырҙарында "китап ҡарау — ғәҙәтебеҙ буш ваҡытта" тип, даими китап уҡыуы, китаптан ғилем сүпләүе хаҡында белдереүҙе кәрәк һанаған автор. "Ай, донъя" тигән шиғырында ул үҙенең дини йүнәлешен да асыҡлап китә:

Арғы атам — Хәнәфиә, хорасанлыҡ...

Аҡмулланың шиғри мираҫын иғтибарлыраҡ анализлағанда, уның ҡайһы авторҙың әҫәрҙәре менән таныш булыуы төҫмөрләнә. Мәҫәлән, "Урыным — зиндан", "Моңло егет зарын әйтер...", "Булмаған" шиғырҙарында һүҙмә-һүҙ тиерлек ҡабатланып килгән юлдар бар:

Йофарҙың пошоҡ кеше еҫен һиҙмәҫ,
Гөл еҫен ҡайҙан һиҙһен томшоғо осҡан?..

Йәки:

Татлы балдың ләззәтен һиҙмәҫ томшоғо серек...

Белеүебеҙсә, Ш.Зәки, Ҡазанға уҡырға барғас, мәҙрәсә хужаһы Мөхәммәткәрим менән тәү осрашыуҙа уҡ бәхәскә инеп, тап ошондай "баҡ ғөлнө нәйләсүн ул, томшоғо еҫ һиҙмәгән" тигән төртмә шиғыр менән яуап ҡайтарған, имеш[3]. Аҡмулла был һүҙҙәрҙе бүтән кешенән түгел, ә Ш.Зәкиҙең үҙенән ишетеүе ихтимал. Әҫәрҙәрендә йыш ҡулланыуына ҡарағанда, остазының тапҡыр һүҙҙәре уның күңеленә бик хуш килгән. Суфый шағирҙың башҡа шиғырҙарындағы айырым юлдар, тоторoҡло һүҙбәйләнештәр, шулай уҡ Әбелмәних Ҡарғалының донъяның алдаҡсылығы, фәкирҙәргә ҡапҡа асмау һәм шуның ише айырым поэтик деталдәр, Һибәтулла Сәлиховтың "Мәжмәғ әл-әдаб" рисәләһенән айырым өҙөктәр Аҡмулланың теге йәки был әҫәрҙәренең ("Нәсихәттәр", "Әйләр", "Йырау", "Аҡмулла, хәлеңде бел...", "Аһ, дәриға!..", "Донъя" һ.б.) шиғри туҡымаһына инеп киткән.

"Суфый", "суфыйлыҡ" төшөнсәләренең мәғәнәһен тәрәндән асыҡлап яҙғандары булмаһа ла, тасауыфҡа, ғөмүмән, мөнәсәбәтен белдергән бер нисә шиғыры бар. Шуларҙың береһенә "Бей булмаҫ..." тип баш ҡуйылған һәм уның йөкмәткеһе суфыйлыҡтың асылын аңлатыуға йүнәлтелгән:

Бей булмаç билен ялпаҡ быуған менән,
Таҙармаç асылы харам йыуған менән.
Ҡай(һы) наҙан, күҙен йомоп, битен һыйпай —
Суфыйлыҡ табылмаç күҙ йомған менән.

Автор фекеренсә, суфыйлыҡ — аҡыл күрһәткесе, һәр кемдең күҙенә ташланып торған формаль ғәмәл-ҡылыҡтар менән генә уға өлгәшергә маташыу — ул наҙанлыҡ билгеһе. Суфыйлыҡҡа Аҡмулла көсөргәнешле рух эшмәкәрлеген талап иткән һәм эске хәләткә бәйле ҡатмарлы процесс итеп ҡарай. Наҙанлыҡҡа ҡаршы ҡуйып, суфыйлыҡ сифатына бары ғалимдар ғына эйә була ала, тигән фекерҙе үткәрә үрҙәге дүрт юллыҡта.

XVIII быуаттың етмешенсе йылдарында Аҡмулла Ҡустанай, Күксәтау, Петропавловск яҡтарына барып сыға. Петропавловск ҡалаһында бер ваҡыт ҙур мәжлестә ҡаҙаҡтың мәшһүрмен тип йөрөгән Нурғоч исемле шағиры менән әйтешә. Аҡмулла Нурғоч аҡынды ”гәзиттәргә һүҙ яҙмаҡ”, ”пособлять ҡылаһың редакторға”, ”өләңгә пародия яҙып, тәхфиф (һүҙ ҡыçҡартыу) ҡылаһың, шул арҡала муллалығың бөтөп, дин сәсмәçлек булып, дөрөç юлдан яҙғанһың” тип, тәнҡит утына ала. Ә Нурғоч үҙ сиратында Аҡмулланы ”фәҡирлекте хуш күреп, өйҙән өйгә эт һуғарып йөрөүҙә” мыçҡыл итә, ниндәйҙер ҡурҡаҡлыҡта ғәйепләй:

Батырлыҡты хуш күрер аҡыллы әҙәм,
Ҡурҡаҡлыҡ суфыйлыҡта булған харам...

Кинәйәгә ҡоролған һүҙ ярышында әйтелгән был ғибәрә, Аҡмулланың, йәнәһе, ҡурҡаҡлығы уның суфыйлығын харамға йәки яраҡһыҙға сығарыуына төрттөрә. ”Ғилемлеккә талпынған мәшһүр бисара” тип, Нурғоч Аҡмулланың, йәнәһе, ни суфый, ни ғалим була алмауынан әсе көлә. Фекерҙе төйнәп әйткәндә, ҡаҙаҡ араһындағы ғөләмәләр Аҡмулланың суфыйсылыҡҡа бәйләнеше барлығын таныған, икенсенән, ”суфизм” һәм ”ғилемлек” төшөнсәләрен бер-береһенән айырылғыһыҙ итеп ҡараған.

”Борадәргә” шиғырында, текстан аңлашылыуынса, шағир ысын мулла образында З.Рәсүлиҙе күҙ уңында тотҡанға оҡшай. Зәйнулла ишан яҙмышында, Р.Насировтың эҙләнеүҙәренә таянһаҡ, Буҙыҡаев кантон кире роль уйнаған. Икенсенән, тасаууыф китаптары менән мәшғүл суфый һәм дә ғалим — ул, әлбиттә, З.Рәсүли. Ҙур булмаған шиғырҙа суфыйлыҡ юлы (нәфес үлмәй, күңел һынмай, вөжүд китмәй, ожмахҡа бик тиҙ генә керәһеҙме?) һыҙыла, әммә суфыйлыҡ хаҡында шунан артыҡ бер ни ҙә әйтелмәй. Артабан шиғырҙа ”Рәсүлиә” мәҙрәсәһендә үткәрелгән сәйәсәт һәм З.Рәсүлиҙең эш программаһы һынланған кеүек. Аҡмулла, дөрөçөн әйткәндә, ”борадәрем”, ”ҡәрҙәштәр” тип үҙ осорондағы замандаштарына, китап һөйөүселәргә өндәшә һәм уларға Зәйнулла ишан эшмәкәрлегенең төп йүнәлештәре хаҡында ҡыçҡаса аңлатма бирә һымаҡ.

Беренсенән, милләттең берҙәмлегенә һәм үҙ-ара татыулығына өлгәшеү. Белеүебеҙсә, З.Рәсүли был хаҡта махсус өндәмә-нәсихәтнамә яҙып, берҙәмлекте милләттең алға барыуының төп шарты итеп ҡарай. Аҡмулла ла ихлас күңелдән:

Һай, ҡәрҙәштәр, талашмайыҡ булып баҡ-баҡ,
Был һүҙемдә маҡсатым күренер хаҡ.
Милләтте маҡтауға камил булһаҡ,
Шәкерттәр уҡып әйтер — нимә нахаҡ, —

тип өндәшә осорҙаштарына. ”Аһ, дәриға!.. — тип әсенә ул икенсе бер шиғырында. — Беҙҙең йортта юҡ иттифаҡ (берҙәмлек, союз), арабыҙҙан бер кәшшаф (яңылыҡ индереүсе) сыҡҡаны юҡ, тырышҡан халҡына теләп иттифаҡ!” Аҡмулланың бүтән шиғырҙарында ла, мәҫәлән, ”Иҫкәртеү”, ”Егетлек хәсиәте — мәғрифәттә” лә берҙәмлек мотивы үҙәккә ҡуйыла.

Икенсенән, милләтте алға әйҙәү идеяһы. Төрлө ҡурҡыныстарҙан, айырыуса юғалыу-тарҡалыуҙан һаҡлар өсөн һәм ошо юлда ҡаршы сыҡҡан дошмандарҙы еңеп сығыу өсөн ”ғөлүме жәдидләре зарур булды” тип, яңы ғилемдәр кәрәклеген билдәләй Аҡмулла.

Һүҙ ыңғайында иҫкә төшөрәйек: 1906 йылда атаһы менән Әхмәтзәки Вәлиди Троицкиға барғас, уның ғилемгә ынтылышын күргән хәҙрәт, ”урыҫса беләһең, французса өйрәнә алһаң, бик яҡшы” тип маҡтаған. Бындай һүҙмә-һүҙ тап килеште осраҡлы тип булмай. Аҡмулла З.Рәсүлиҙекен түгел, киреһенсә, Зәйнулла ишан Аҡмулланың шиғырындағы фекерҙе иҫенә һалыуы ла бик мөмкин.

Өсөнсөнән, мосолманлыҡты, динде һаҡлау һәм яҡлау идеяһы. З.Рәсүлиҙең был юҫыҡтағы позицияһы хаҡында байтаҡ ҡына хеҙмәттәрҙә, мәҫәлән, Х.Алғар, И.Насировтарҙың мәҡәләләрендә телгә алына. Рәсәйҙәге мосолмандар хәрәкәтендә туранан-тура ҡатнашмаһа ла, Зәйнулла ишан үҙенең педагогик һәм фәнни эшмәкәрлеге менән батшалыҡ үткәргән колониаль сәйәсәткә ҡаршы көрәшкә хеҙмәт итә. Мәҫәлән, З.Рәсүли 1907—1908 йылдарҙа Ырымбурҙағы бер нәшриәттә Һижазда йәшәгән башҡорт ғалимы М.Рәмзиҙең ”Тәлфиҡ әл-әхбар вә тәнҡих әл-әҫар фи вәҡаиғи Ҡазан вә Болғар вә мөләкит-татар” (Ҡазан, Болғар һәм татар хакимдары тураһында хәбәрҙәр, шулай уҡ улар хаҡындағы ваҡиғаларға бәйле әҫәрҙәр йыйылмаһы) тип баш ҡуйылған ике томлыҡ хеҙмәтен баҫтырыуҙа ярҙам итә. Төркиҙәрҙең үткәне бөйөк ғорурлыҡ менән, рустарҙың иҙеүе асыу менән аңлатылған был китап, бер яҡтан, милли азатлыҡҡа ынтылыу тойғоһон һеңдерһә, икенсе яҡтан, йәмғәтселектә ил һәм халыҡ тарихына ҡыҙыҡһыныу уятып, тарихи аң һәм донъяға өр-яңы ҡараш тәрбиәләүгә ҙур өлөш индерә[4]. ”Рус мөғәллим мәктәбендә (учительская школа) уҡып, ислам сығанаҡтары биргән мәғлүмәттәр менән сағыштырырға тип үҙемә маҡсат ҡуйҙым, — тип яҙа Әхмәтзәки Вәлиди. — Был фекерҙе миндә, башлыса, Морат Рәмзи уятты”[5].

Рәсәй батшалығы алып барған руслаштырыу, христианлаштырыу сәйәсәтенә ҡаршы тороуҙың һәм милләттең үҙаңын, милли йөҙөн һаҡлап ҡалыуҙың иң ҡулай сараһы итеп йәмғәтселек тарафынан ул осорҙа ҡаралған идеология — ул ислам дине. Аҡмулла ла шиғырын шул рәүешле тамамлай:

Иң әүүәл үҙ динендә заһир булһын,
Иғтиҡадта (иман) ҡөҙрәтең таһир булһын.
Һиндостан ғәләмендәй ныҡ тороп,
Исламға ҡаршыларҙы ҡаһир (еңеп сығыусы) булһын!

Шулай уҡ ”Аҡмулла, хәлеңде бел” тип исемләнгән шиғырында ла үрҙәге фекерҙәр ҡабатлана. Был юлы шағир, башҡаларҙы түгел, үҙен-үҙе ороша: ҡоро һүҙ менән генә мәшғүл булып, милләт эшен онотҡан, йәнәһе:

Аҡмулла, хәлеңде бел: үҙең ҡалай,
Үҙеңә лайыҡ түгел һүҙең ҡалай.

Вәғәзсе күп, берҙәмлек юҡ — оят ҡайҙа?
Ҡолағыңды борорлоҡ һинең, малай!..
Һөнәре булһа, тырышҡан юлда ҡалмаç,
Тырышмай тик ятҡандан файҙа булмаç.
Уҡыр өсөн шарт түгел Бағдад, Хәләб:
Сыбар үгеҙ, Бохар барып, мулла булмаç!

Ә инде муллалыҡтың, ғилемлелектең әһәмиәте милләт өсөн эштә күренә:

Ғалим булһа, милләт өсөн зарлы булһын,
Кәрәк ул бай, кәрәк ярлы булһын...

Ғөмүмән, Аҡмулла муллалыҡ һәм ғалимлыҡ араһында йыш ҡына тигеҙлек билдәһе ҡуя. Муллаларҙың бер өлөшө — ялған муллалар, ғалим аталып йөрөүселәр генә, ә икенсе, ҡыҙғаныса ҡаршы, бәләкәйерәк өлөшө — ысын муллалар, йәғни ғалимдар. Ысын ғалимлыҡтың бер сифаты — милләт мәнфәғәтенә хеҙмәт итеү, уның киләсәге өсөн янып-көйөү. "Замана ғалимдәренә" тәнбиһ-иçкәртеү формаһында яҙылған шиғырында ысын мулла һәм "күрер күҙгә мулла һымаҡ"тарҙың айырмаһын асып һала шағир. Сәлләне килештереп урап, тыштан мулла булып күренгәндәр бар, улар инсафһыҙ, үҙен генә уйлай, байлыҡ ҡайғырта, бер-береһен яманлай, белемһеҙ, алдаҡсы, түрәләргә ярамһаҡлана, тура һүҙҙе күтәрмәй, көсө еткәнгә шәп һ.б. Ысын муллалар — шуларҙың киреһе:

Мулла шул: дин өйрәтеп, хаҡ алмаһа,
Донъяға динен һатып, юғалмаһа...
Өйрәтһен шәкерттәргә әүүәл иман,
Мулла булһын дин өсөн йәнен ҡыйған.
Мәғәнәһен үҙ телендә төшөндөрһөн,
Вә илә ике яҡлап булыр иман...
Мулла булһа, ҡурҡаҡ булып, зарлы булһын,
Кәрәк бай, кәрәк ул ярлы булһын...
Тәһәрәт-намаҙ дөрөçләп белмәһәң дә,
Муллалыҡ төрлө фәндән урмаҡ кәрәк...

"Ғилемдең емештәрен ала алыу" юлында "ғилем һаҡлау әмәлен ҡылып", күберәк тәфсир, хәдис ҡарарға саҡыра Аҡмулла. Дин ғилеме хаҡында һүҙ барғас, ғилемлек һәм муллалыҡ төшөнсәләренең синонимдар сифатындараҡ ҡулланылыуы ғәжәп түгел. "Ғилем — бер нур", "ғилемдең төп шарты — дөрөçлөктөр", "ғилемлек — даръялыр, ҙур рыялыҡ булмаһа" һәм башҡа миçалдарҙа "ғилем" төшөнсәһе образлы кәүҙәләндерелә. Ғилемгә эйә булыу ғына ғалим өсөн аҙ. "Ҡоро белем файҙа бирмәй, әгәр эсең таҙармаһа", тип иçкәртә шағир Мәржәнигә ҡаршы сыҡҡан Нурғәли хәҙрәтте. Суфыйсылыҡ телендә, Аҡмулла яҙғанса, "иң әүүәл паклау кәрәк эстең керен" — ул рухи камиллашыу юлы. Әйткәндәй, "камил әл-инсан" булыу, үҙеңдә камиллыҡ сифатын тәрбиәләү — Аҡмулла тарафынан кешеләргә ҡарата ҡуйылған иң юғары талабы. "Камилдың яҡшылыҡ дәлиле — эстә", ти ул. Осороноң иң камил заттарының береһе итеп Аҡмулла Ш.Мәржәниҙе иçәпләй:

Ҡай эше ул фазылдың таң ҡалмаçтай?
Ҡай һүҙе ул камилдың күҙ һалмаçтай?

Үҙенең атаҡлы мәрҫиәһендә Мәржәни йөҙөндә ул камиллыҡ һыҙаттарын тасуирлай. Мәшһүр ғалимдың әхлаҡи йөҙөн шағир "тура һүҙлелек, әҙәплелек, һиҙгер йөрәкле, тәрбиәлелек, кешене кешенән айырмау, тоғролоҡ" кеүек сифаттар менән билдәләй. Икенсенән, Мәржәниҙең аң даирәһе киң һәм ул зиһенлелек, һәләтлелек, ғилемлелек ише һыҙаттары менән күркәм. Аҡмулла Мәржәнигә хас иң камил сифаттарҙы — уның һүҙ оҫтаһы һәм фекер эйәһе булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала:

Һүҙ ҡуҙғатыр ул аҫыл ир кәрәк ерҙән...
Һәр ерҙә дәлил менән һүҙе баһир (аныҡ),
Ирҙең хәле беленер, ләфз (һүҙ) атһа,
Был заманда тыуғаны юҡ уға тиңдәш,
Мәғрифәтле ирҙәрҙән уға тиңдәш...

Иң мөһиме: Мәржәниҙең ғалимлығы уның хаҡ юлында хәҡиҡәт өсөн көрәшеүендә күренә:

Гәүһәрҙәй фекерҙәрен ҡулға элгән,
Хәҡиҡәт диңгеҙенә ғәууас (сумыусы) булып...
Ул бер фазыл ғаллмә (эрудит) — уҙған таптан,
Өлөшө бар дәрәжәи ижтиһадтан.
Дошмандарға ҡаршы тороп йән аямай,
Уның өсөн көрәшсебеҙ алғы сафтан...

Аҡмулла тарафынан Мәржәниҙең аҡыл ҡеүәһе, уның ғалимлыҡ кимәле билдәләнә билдәләнеүен, тик ул "ысын мәғәнәһендә тарихсы, методолог, этнограф, философ, көнсығыш телдәре белгесе, мәғрифәтсе" тигән хәҙерге фәндәге баһалауҙарға тап килмәй. Бына шағир мәрҫиәлә үҙенә иң әһәмиәтле тойолған Мәржәниҙең хеҙмәттәрен берәм-берәм барлап сыға. Мәҫәлән, "Назурәт" китабын, күңеленә шифа итеп, ун биш йыл даими уҡыуын һәм ҡәҙерләп баш осонда ғына һаҡлауын белдерә. "Жәлал"ға (урта быуат мосолман философы, дин белгесе Жәләлетдин Дуваниҙың (? — 1503) "Шәрхе ғаҡаид" тигән әҫәре хаҡында һүҙ бара) хашиәһендә (Мәржәни хеҙмәтенең тулы исеме тәржемәлә "Жәләл китабын аңлау өсөн кәрәкле саф шишмә һыуы" тип атала) Мәржәни хәҡиҡәт байрағын күтәреп бара һәм шуның өсөн күпме мәдех ҡылынһа ла аҙ тойолор, тип иҫәпләй Аҡмулла. Ә инде ғалимдың "Хикмәте балиға" хеҙмәтен (тулы исеме "Әл-хикмәт, әл-балиға ал-джуннийа фи шархи әл-ғаҡаид ал-ханафийа" — "Зрелая философия, помогающая объяснить веру ханифитов" — иҫке мәҙрәсәләрҙә төп дәреслек итеп файҙаланылған Сәғдетдин Тафтазани (1322—1390) китабына шәрех)[6] "зауҡы сәләмәт әҙәмгә балдай, тәнендә йәндәй хәҡиҡәт асылы" яҙылған, тип маҡтай. Мәржәниҙең айырыуса хәдиҫтәге оҫталығы уны "ғали ғалим" дәрәжәһенә күтәрә, тигән һығымта яһала мәрҫиәлә:

Хәдистәге оҫталығын күҙгә алһаң,
Әсхабтан ишеткәндәй аңлай икән!
Быңдай ғали ғалимға тел оҙайтҡан —
Ул үҙе дүрт аяҡлы малдай икән.

Ҡыҫҡаһы, Аҡмулла барыһынан элек Ш.Мәржәниҙең атаҡлы дин белгесе булыуын, дингә бәйле мәсьәләләрҙә хәҡиҡәтте эҙләүен һәм уның өсөн батырҙарса көрәшеүен юғары ҡуя. Мәржәниҙең дошмандары йөҙөндә Аҡмулла камил заттарҙың антиподы образын һынландыра. Дөйөмләштереп

алғанда, шағирҙың тәнҡит утында көүҙәләнгән кире геройҙарға хас сифаттар әхлаҡи характерҙа: ошаҡсы, яла яғыусы, ғәйбәтсе, хөсөтсө, тәкәббер, алдаҡсы, көнсөл, маҡтансыҡ, ғәмһеҙ, белекһеҙ, мин-минлек көслө, кешенән көлөп мыҫҡыллаусы, ҡурҡаҡ, холоҡһоҙ, аҡылһыҙ һәм башҡалар.

Уларҙағы насарлыҡ сәбәбе — наҙанлыҡ. ”Кара наҙан, донъя ҡыуып, мәғрифәткә ҡарамаған әҙәмдәр” ғилем ҡәҙерен дә белмәҫ, яҡшыны ла күрә алмай, ҡаршылыҡ, дошманлыҡ ҡылыр. Шулай итеп, Аҡмулла уҡымышлы заттарҙы, муллаларҙы икегә бүлә: ысын муллалар һәм әхлаҡһыҙ, әҙәпһеҙ муллалар. Һуңғыларын ул:

Кил, борадәрем, инсафҡа кил!
Ҡеүәтең күпме икән, самаңды бел!
Хәлдән килһә, уның эшен һин дә эшлә,
Булмаһа, файҙа бирмәҫ таҡылдаҡ тел, —

тип, үҙҙәренең күңелдәрен таҙартырға, боҙоҡлоҡтарҙан арынырға, рухи яҡтан сафланырға саҡыра. Был яғы менән Аҡмулланың ҡараштары Ш.Зәки, Һ.Сәлихов һәм бүтән суфый шағирҙарҙың фекерҙәре менән ауаздаш һәм уларҙың әҙәпкә саҡырған ҡараштарынан артыҡ айырылмай.

”Нәсихәттәр”, ”Ҡәнәғәт”, ”Инсафлыҡ” кеүек шиғырҙарында Аҡмулла шулай уҡ ”камил әл-инсан” йәки ”ғариф” булыу юлын, мәкамдарҙа ирешергә тейешле сифаттарҙы күҙ уңында тота: “иң әүүәл — иман, шунан күңел һәм аҡыл берлеге, шөкөр, әҙәп, сабыр, ихлас. Тәүбә, тәүфиҡ билгеһе — ҡәнәғәтлек” тип яҙа ул үҙенең ”Инсафлыҡ” шиғырында. ”Уҡыным ҡан йотоп...” тигән бәләкәй генә әҫәрҙең йөкмәткеһе донъяға алданған һәм донъя михнәттәренән ғазап сиккән һәм мәңгелек-баҡый донъя хаҡында хыялланған суфый зарҙарынан ғибәрәт. Тасаууыф шиғриәтенең йәшерен мәғәнәле, кинәйәле символикаға ҡоролғанын иҫәпкә алып еткермәйенсә, ҡайһы бер шиғырҙарының, мәҫәлән,

Уҡыным ҡан йотоп ҡайғы китабын...
Әзәлдең кәтибе яҙған икәндер,
Шуның өсөн дәрт илә диуана булдым...
Күп яфа тарта-тарта, киткән көйөм... —

тип, ошоноң ише үтә хәсрәтле яңғырауына нигеҙләнеп, Аҡмулланың ғәжәп ауыр, тәрән хәсрәттә йәшәүе тураһында ҡайһы берҙә бигүк дөрөҫ булмаған һығымта яһала. Шулай уҡ ”Жөда”, ”Донъя”, ”Ай, донъя” кеүек әҫәрҙәрендә лә суфыйсылыҡ мотивтары ярылып ята. Әммә шуларға нигеҙләнеп кенә Аҡмулланы суфый шағирҙар рәтенә ҡуйып булмай. Уның суфыйсылығы үҙенә бер төрлө. Дөрөҫөн әйткәндә, Ш.Зәки һәм башҡалар суфизм идеологияһының төп нигеҙҙәрен поэзия теленә күсерһә, Аҡмулла шиғриәтендә ана шул тасаууыфты ябай халыҡ нисек аңлаған һәм үҙенсә ҡабул иткән — шул сағыла.

Халыҡтың һөйләү телендә ”тәүбә, шөкөр, ҡәнәғәт, сабыр, сафлыҡ, камиллыҡ” кеүек һүҙҙәр даими ҡулланылышта йөрөп, уларҙың һәр береһенең үҙ аңлатмалары, донъяуи мәғәнәләре ныҡынған. Улай ғына түгел, һәр ҡайһыһы тиерлек мәҡәл-әйтемдәрҙең доминанта төшөнсәһе итеп һайланған: ”инсафтың теле саф” (171, артабан йәйәләр эсендә һәр мәҡәлдең китаптағы һан иҫәбе күрһәтелә),[7] ”ҡәнәғәтленең күңеле

киң, тарлыкта ла тарыкмай" (374), "нәфсе — шайтан, акыл — иман" (426), "сабырлык — сәләмәт, сабырһыҙлык — һәләкәт" (452), "тәкәбберҙән тәңре биҙгән" (529), "әҙәмде әҙәм иткән — әҙәп" (670), "камил камилды белер" (1114), "хаклык төбө — шатлык" (1489), "әҙәп барҙа иман бар" (672), "ожмах — золом юк ерҙә" (1467) һ.б. Был мәкәлдәр халыктың әҙәп канундары, мораль-этик нормалар рәүешендә быуындан-быуынға тапшырыла килә. Акмулла шиғриәтендә лә суфыйсылыктың төп йөкмәткеһен сағылдырған терминдар тап халык аңлаған мәғәнәлә кулланыла һәм шуның һөҙөмтәһендә тағы ла тәрәнерәк фәлсәфәүи яңғыраш ала. Мәсәлән, "ысын муллалык — ул ғалимлык" йәнәшәлегенә иғтибар итәйек. Был ике төшөнсәнең араһында тигеҙлек билдәһе куйыуҙы яңылык тип әйтеүе кыйын, сөнки быуаттар һуҙымында был фекер төрлө авторҙар, шул иҫәптән суфый шағирҙар, тарафынан кабатлана килгән. Акмулла иһә был ике төшөнсәгә өсөнсө параллель таба: ғалимлыкты егетлек менән бәрәбәр куя. Мәсәлән, "Уяныу" шиғырында:

Баксалай, егет әҙәм күркәмләнә,
Ғилем менән һүҙ һөйләһә бал шикелле... —

тиһә, икенсе бер шиғырында "егетлек хәсиәте — мәғрифәттә" тип иҫбатлай. "Нурғоч акын менән әйтеш"тә үҙен-үҙе "мәшһүрмен" тип мактанған казак акынына:

Гәүһәр, тип, үҙеңде-үҙең мәдехләйһең,
Ғалимдар танылалыр, егет, тиһә, —

тип яуаплай шағир. Йәиһә Мәржәнигә арналған мәрҫиәлә:

Дәрәжәле дамелланың мәдехе калай
Ләззәтле, ғибәрәһе егет һымак, —

тип, һүҙ оҫталығын егетлек итеп күрһәтә. "Наҙан дәрәжәгә ынтыла, ғалим камиллыкка" (3076) тигән халык мәкәлендәге кеүек, Акмулланың әҫәрҙәрендә лә наҙанлык ғилемлеккә каршы куйыла. Был фекерен автор, шиғырынан шиғырына кабатлап, китап укыусыларҙың, тыңлаусыларҙың аңына нығырак һеңдерергә тырыша, ғилемлекте, мәсәлән, байлык һәм хакимлык кеүек социаль халәт менән бутамаҫка сакыра:

Байҙар йөрөй һөнәр күреп волостнойҙы,
Кыҙырып, табыш күреп ит менән сәйҙе,
Бейлекте, камиллык тип, карынын һыйпап,
Ученый дәрәжә тип ауылнайҙы...

Акмулла "камилдың камиллығын инкар кылмаған, дин өсөн йәнен кыйған муллалык-ғалимлыкты" наҙанлыкка йәки, ғәрәп һүҙе менән әйткәндә, яһиллыкка каршы куя.

"Яһиллык" туранан-тура тәржемәлә "томаналык, наҙанлык" тигәнде белдерә. Ғалимдар, "джаһилийәт" һүҙенең боронғо тамырҙарын юллап, Көрьән китабындағы кулланылышын өйрәнә һәм унда "кырағайлык, томаналык, хатта яуызлык (жестокость) мәғәнәһендә йөрөй тип иҫәпләй.[8] "Моңло егет зарын әйтер..." шиғырында Көрьән тексына ингән Хабил һәм Кабил (Библияла — Авель һәм Каин) образдарына мөрәжәғәт итә:

Балаһы Әҙәм-атаның: Әбел, Кабыл,
Бере Ғалим, берәүе булған Яһил...

”Егетлек хәсиәте — мәғрифәттә” шиғырында иһә:

Ни лазым — шуны белмәк инсаниәт:
Һәр нәмә үҙгәреүҙән булмайҙыр ят.
Әҙәмгә лайыҡлы бер эште белһәк,
Айырылалар шунда беҙҙән хайуаниәт...
Ҡымыҙ эсеп, һөнәр түгел ит аҫтырған,
Беҙҙәрҙе яһәләткә тоташтырған, —

тип, автор тағы ғәрәпсә атама ҡуллана. Күреүебеҙсә, ”наҙанлыҡ”ҡа ҡарағанда ”яһәләт” һүҙенә күпкә тәрән, Ҡөрьән китабына ярашлы мәғәнә һалынған. Үҙ сиратында яһәләт мәғрифәткә ҡаршы ҡуйыла. ”Мәғрифәт” һүҙе суфыйсылыҡта бик популяр булып, рухи камиллашыуҙа бер этаптың — алла менән ҡушылыуға яҡынлашыуҙы белдергән өсөнсө баҫҡыстың — атамаһы булып нығынған. Аҡмуллала иһә ”мәғрифәт”кә донъяуи мәғәнә һалына. Унынса, мәғрифәт — ул иң әүәл тормош, йәшәү өсөн кәрәкле ғилем, шул уҡ ваҡытта ”коро ғилем”, абстракт белем генә түгел, ә көндәлек йәшәйеш өсөн тәғәйенләнгән белем һәм һөнәр. ”Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!” тип оран ташлауы — шағирҙың донъяуи ғилемгә эйә булыуға саҡырыуы ул:

Илтифат ит: уҡыуҙалыр шәрафәттәр,
Яһиллыҡтан килә ятыр ҙур афәттәр...
Ырыҫ, дәүләт шишмәһен асам тиһәң,
Ғилем-һөнәр берҙән-бер әмәл булыр...

”Мәғрифәт диңгеҙенә сумғым килер” тип, суфыйсыл ғишыҡта ярһыған Ш.Зәки шиғырынан ҡырҡа айырыла Аҡмулланың түбәндәге юлдары:

Егетлек хәсиәте — мәғрифәттә,
Илдә үҫкән һөнәр түгел ғафил ятмаҡ...
Мәғрифәт даръяһы күптәргә уртаҡ,
Ынтылып, хур ҡалмайҙыр ҡулын тыҡҡан...

Уларҙың лирик геройы алдына ҡуйылған маҡсаттар ҙа бөтөнләй башҡа. Мәғрифәткә эйә булыуҙа суфый үҙенең шәхси камиллығын иң алға ҡуйһа, Аҡмулла, мәғрифәткә өлгәшеүҙе, халыҡтың алға китешенә хеҙмәт итеү өсөн кәрәкле, тип һанай:

Йән бармы ошо һүҙгә ҡолаҡ һалыр?
Һуйылым юҡ һаңғырауға һуғып алыр.
Мәғрифәт, тип, халыҡҡа файҙа эҙләп,
Йән бармы ғилем һүҙҙе ауыҙына алыр?

Ошо юлдар ингән ”Аҡыл” шиғырының дөйөм йөкмәткеһе, бер ҡарағанда, Ш.Зәкиҙең ”Сүзеңде сетр илә сөйлә” тигән шиғырына ауаздаш кеүек. Шулай уҡ наҙандарҙан төңөлөү, ғалимлыҡты баһалай белмәгәндәр араһында телде тыйыу, артығын һөйләмәү һәм башҡа мотивтар хас.

Аҡмулла ла ”ун бәләнең туғыҙы телдән тыуыр”, ”телде байҡап һөйләгеҙ аҡыл менән”, ”наҙан менән биш көн тороу — йылға торош” тип яҙа, әммә унын яҙғандары шәхси йән тыныслығы, үҙ хәүефһеҙлеге өсөн түгел, ә дөйөм мәнфәғәт хаҡында бара. ”Аҡылы бар әҙәмдәр телен тыйыр” тигән иҫкәртеү һүҙе асылда аҡыллы заттарға тәғәйенләнә һәм уларға кәңәш булып яңғырай. Ҡымыҙ эскән бәйгеләге сәсән һүҙе, халыҡҡа тәғәйенләнгән ғалим һүҙе һәр саҡ аҡылға буйһона, ә инде сафсата, яман һүҙ, һаҡһыҙ-уйламай һөйләнгән һүҙ, асыу-дошмандан ҡупҡан

һүҙ — барыһы ла наҙанлыҡтан, тип тасуирлай шағир. Аҡыллы һүҙ һәр берәүҙе тиңдәр араһында тиң итә, шуға ла, аҡыллы заттарға мөрәжәғәт итеп, Аҡмулла һүҙ һәм эш берлеге, һүҙ һәм кешелеклелек дәрәжәһенең тиңлеге, һүҙ һәм ҡараштар тотороҡлоғо тураһында фәлсәфәүи дөйөмләштереүҙәр яһай:

Атаң ҡуйған ат менән аталырһың,
Хеҙмәтеңә ҡарай илеңдән бата алырһың...
Дәрәжәң, ошо һүҙҙе тотһаң, артыр,
Яҡшы ниәт һәр саҡ яҡшылыҡҡа тартыр...
Бәхетең артыр, кәм булып яралмаһаң,
Кемдәр юлай ҡашыңа — һарылмаһаң,
Урынһыҙ ерҙә телде тыймаҡ кәрәк,
Серең ситкә сығарма, ярылмаһаң...

Тасауыф рухындағы ҡайһы ғына шиғырын алма, шағирҙың үҙенә генә хас кинәйә, аллегория, йәнләндереү һәм башҡа һүрәтләү саралары нигеҙендә ундағы суфыйсыл мотивтар халыҡсан һәм тормошсан планға күсерелгәнлеге күҙгә ташлана. Уның әҫәрҙәрендә, бер яҡтан, диндән, тасауыфтан яралған фекерҙәр, икенсе яҡтан, башҡорт һәм ҡаҙаҡ халҡының донъяға, тормошҡа, осор йәмғиәтендәге көнүҙәк ижтимағи-социаль мәғәнәләргә ҡарашы бергә үрелеп китә, шуларҙың синтезында тәрән философик дөйөмләштереүҙәр яһала. Шуға ла XIX быуаттың икенсе яртыһындағы, айырыуса быуат аҙағындағы әҙәби-эстетик фекерҙәрҙең тупланмаһы булыуҙан тыш, Аҡмулланың ижады заманының фәлсәфәүи һәм ижтимағи-сәйәси фекер торошон өйрәнеү өсөн төплө фәнни сығанаҡ булып хеҙмәт итеүе бик тәбиғи.[9] Аҡмулланың шиғриәтенә таянып, ислам дине һәм шунан тамырланған суфизм тәғлимәтенең ябай халыҡ аңына үтеп инеү һәм үҙләштерелеү юлдарын, суфыйсылыҡ идеяларының оҙайлы йәшәү сәбәптәрен өйрәнеүгә мөмкинлек тыуа.

Әҫәрҙәренән аңлашылыуынса, тасауыф положениелары халыҡтың йәшәү рәүеше һәм тормош тәжрибәләре нигеҙендә формалашҡан мораль-этик ҡанундарға яраҡлаштырыла. Суфыйсылыҡ төшөнсәләре әҫәр тексында мәғәнәүи трансформация кисерә: халыҡ аңындағы кешелеклелек, ғәҙеллек, яҡшылыҡ кеүек дөйөм кешелеккә хас гуманистик сифаттар менән тулылана.

Башҡорт халыҡ ижадында ла суфыйсылыҡ поэзияһындағы айырым шиғыр юлдарын хәтерләткән, айырым фекерҙәрҙе һүҙмә-һүҙ тиерлек ҡабатлаған таҡҡыр һүҙ өлгөләре осрай. Мәҫәлән, мәҡәлдәр араһында "әҙәп барҙа иман бар" (672) һымаҡтар ҙа теркәлгән. Ошо типтағы раҫлауҙарҙың мәҡәл-әйтемдәргә әүерелеүе, киреһенсә, яҙма әҙәби сығанаҡтарҙы уҡыу һәм яҡындан үҙләштереү һөҙөмтәһе булыуы ла мөмкин. Нисек кенә булмаһын, бындай ассоциациялар дин һәм суфизм әҙәбиәте традицияларының халыҡ аңына көслө йоғонтоһо хаҡында һөйләй. Суфизмдың практикаһынан бигерәк, уның фәлсәфәүи йөкмәткеһе халыҡ тарафынан үҙенсә аңлап ҡабул ителгән, һәм суфыйсылыҡтың оҙайлы йәшәүе, хатта егерменсе быуат сиктәренән үтеп сығыуы шуның менән бәйлелер, тип раҫлау ҙа хата булмаҫ. 1911 йылда "Шура" журналы редакцияһы, үткән быуат әҙиптәренең ҡайһыһы халыҡ хәтерендә һаҡлана икәнлеген асыҡлау маҡсатында китап һөйөүселәргә махсус анкета тәҡдим итә.[10] Килгән яуаптарҙа Ә.Ҡарғалы, Һ.Сәлихов һәм

Ш.Зәки исемдәре атала. Улай ғына түгел, 1905 йылда Ш.Зәкиҙең шиғырҙары "Аҫар"ҙа тәү мәртәбә баҫылып сығыуы татар уҡыусыларына "аяҙ көндәге йәшен" шикелле тәьҫир итһә, Һ.Сәлиховтың "Тәндә йәнем" кеүек шиғырҙары XX быуаттың етмешенсе йылдарында ла айырым кешеләр хәтерендә йөрөүе билдәле булды. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ойоштороған археографик экспедициялар ваҡытында XVIII—XIX быуат суфый шағирҙарҙың ҡулъяҙма һәм күпмелер дәрәжәлә баҫма мираҫының башҡорттар һәм татарҙар йәшәгән төбәктәрҙә ярайһы уҡ тулы һаҡланыуы асыҡланды.

Аҡмулла ижадына килгәндә, унық XIX быуат аҙағындағы әҙәби фекер үҫеше өсөн мөһим бер яғын билдәләү мотлаҡ. Белеүебеҙсә, Ҡол Ғәлиҙән алып Ғ.Усман, Т.Ялсығол, Һ.Сәлихов, Ш.Зәкиҙәр һәм бүтәндәрҙең төп эшмәкәрлеге тәғәйен бер мәҙрәсәлә уҡытыуға һәм үҙ мәхәлләһендә муллалыҡ итеүгә ҡайтып ҡалған һәм поэтик ижады төп эше менән бәйле, йәғни функциональ характерҙа булған. М.Аҡмулла иһә Һабрау, Ерәнсә сәсәндәр ише илгиҙәр шағир булып, үҙ донъя-ҡаралтыһы менән берәй аныҡ урынға төпләнмәйенсә, ауылдан ауылға күсеп йөрөгән. Ул донъя ығы-зығыһынан, матди мәшәҡәттәрҙән, бала-саға тәрбиәләү һымаҡ көндәлек аталыҡ бурыстарынан да азат. Ҡаҙаҡ араһында балалар уҡытып, ҡайһы бер дуҫтарында оҙайлы ғына ғүмер кисерһә лә, матур ғаилә ҡороп, башҡалар һымаҡ йәшәргә тырышып ҡарай, ләкин килеп сыҡмай. "Дәртем бар, дарманым юҡ", ти шағир үҙе был хаҡта:

Талпынып, хәл ҡәҙәре ҡарар инем,
Ҡарарға ҡатын, бала, ашы булһа...

Ҡыҙғаныsҡа ҡаршы, Аҡмулланың ғүмере, хатта һуңғы һулышы ла юлда — сәфәрҙә үтә.

Үҙен ул кем сифатында күрә? Һөнәре, шөғөлө йә белеме буйынсамы, нисек билдәләй һуң үҙенең булмышын?

Үҙемде төҙөк тип аҡламайым,
Күңелемдә булһа уйым — һаҡламайым...
Йомартлыҡ — ҡулда барға, тигән һымаҡ,
Барымды хәл ҡәҙәре аҡҡа һалдым, —

тип яҙа шағир "Егетлек хәсиәте — мәғрифәттә" әҫәрендә. Әйләнә-тирәләге ысынбарлыҡты, халыҡ тормошон һүрәтләү менән бергә, ул үҙенең рухи булмышы, мөҡәддәс уй-фекерҙәре менән дә ихлас бүлешә, үҙенең кешелек һәм ғилемлек дәрәжәһен яҡшы белә, әммә саманан ашмай, үҙенсәлекле кесерәйтеү-ҙурайтыуҙар аша үҙ-үҙенә баһа бирә Аҡмулла. Әҫәрҙәренән аңлашылыуынса, ул үҙен ике сифатта күрә: ғалим-мулла һәм хикмәтле һүҙ сығарыусы шағир. Троицкиҙа төрмәлә ултырған саҡтарында яҙғандарында, мәҫәлән, "Урыным — зиндан", "Солтан Ғәбиҙуллаға...", шулай уҡ "Нурғоч аҡын менән әйтеш", "Замана ғалимдарына", "Нәсихәттәр" тигән әҫәрҙәрендә ул үҙен "мулла-ғалим" тип таныштыра:

Ҡат-ҡат сәләм мин — мосафир Аҡмулланан,
Тура әйтеп, халыҡҡа яҙған хаҡ мулланан...

Аҡмулланың муллалығы, үҙе яҙғанса, күбеһенсә вәғәз һөйләүгә, нәсихәтөгөткә, дөрөҫ һәм тура һүҙ әйтеүгә, яҡшылыҡҡа өндәүгә, йәғни һүҙ менән эш итә белеүгә ҡайтып ҡала.

## ”Тибрәһен шәрбәт телем һәр даим...”

Аҡмулла һүҙҙең бәҫен бик яҡшы аңлай, һәр бер әҫәрендә тип әйтерлек, уңайы тура килгән һайын, поэтик һүҙ һәм уның формаһы хаҡында хәбәр итеүҙе кәрәк һанай. Тура һүҙ — берәүгә им, берәүгә — ыу (”Аҡмулланың һүҙе шул...”); аҫыл һүҙ — балдай татыр (”Нурғәли хәҙрәткә асыҡ хат”); ғалим һүҙе — шәкәр, мәғәнәһе — бал (”Нәсихәттәр”); файҙаһы юҡ буш һүҙгә һәр кем өлгөр (”Егетлек хәсиәте — мәғрифәттә...”); артыҡ һүҙ — әҙәпһеҙлек аҫыл затҡа (”Солтан Ғәбиҙуллаға шикәйәт”); аҡылһыҙҙың үҙ һүҙе үҙен орор (”Аҡыл”) кеүек халыҡ ижадындағы мәҡәл-әйтемдәр шикелле, Аҡмулланың афористик һығымталар яһауы, һүҙҙең кеше аңына тәьҫир иткән магик көсөн даими һыҙыҡ өҫтөнә алыуы уның йәмғиәт тормошондағы әһәмиәтен һәм функцияларын аныҡ күҙаллауы хаҡында һөйләй. Ҡайҙа, кемгә һәм ни маҡсаттан әйтелеүенә ҡарап, һүҙҙең әллә күпме төрөн айыра автор: мәлендә әйтелгән һүҙ, яман һүҙ, тәмһеҙ һүҙ, өлгөр һүҙ, нәфис, татлы һүҙ, хыянат һүҙ, камил һүҙ һ.б.

Һүҙ менән иркен эш итеүен ул ”һүҙ уйнатыу”, ”һүҙ һабағын һүтеү”, ”һүҙ тулғауын яҙыу”, күбеһенсә ”һүҙ әйтеү” тигән ғибәрәләр менән белдерә. Һүҙҙе ”әйтеү” һәм ”яҙыу” араһында йыш ҡына сик үткәрелмәй, йыш ҡына ”тыңлағыҙ әйткәнде” тип башланһа ла, теге йәки был әҫәр тексында һуңғараҡ һүҙҙең ҡағыҙға теркәлеүе лә асыҡлана. Телдән импровизациямы, әллә яҙма ижад өлгөһөмө — ҡайһы осраҡта хатта билдәләүе ауыр. Мәҫәлән, ”Йырау” циклы үҙенең формаль күрһәткестәре буйынса халыҡ ижадының типик күренеше итеп иҫәпләнә ала һәм уны сәсәнлек емеше тип тә баһаларға кәрәк:

> Кил, егеттәр, ҡолаҡ һал,
> Аҡмулланан өгөт ал...
> Һәр кем ғибрәт алһын, тип
> Һүҙ һабағын һүтәмен...
> Әйткәнемдән ғибрәт ал...
> Аҙыраҡ ҡисса мин ҡылдым,
> Ҡәләм алып ҡулыма, —

тип, аныҡлыҡ индерелә ижад эшенә. Йәиһә ”Нәсихәт” тип башлай ҙа, ”әйтәмен, өләң ҡылып, һүҙ тулғауын” тип дауам итә, мәҫәлән, ”Моңло егет зарын әйтер” әҫәрендә. Башҡа әҫәрҙәрендә лә Аҡмулланың ижадында ауыҙ-тел әҙәбиәтенең сифаттары (изустность) ярылып ята.

Икенсе яҡтан ҡарағанда, Аҡмулланың ғәрәп-фарсы һәм төрки әҙәбиәттәре поэтикаһын да тәрән үҙләштереүе күренә. Уның әҫәрҙәренең тексында телгә алынған жанр атамаларын һанап сығыу ҙа шағирҙың был йәһәттән бик мәғлүмәтле булыуын раҫлай. Мөнәжәт, шикәйәт, шиғыр, вәғәз, хат, хитап, нәсихәт, ҡисса, ҡасидә, моназара, мәдех, мәрҫиә — шағир шул осор яҙма әҙәбиәтендәге иң популяр жанр формалары сиктәрендә ҡала, әммә уларға халыҡсан, донъяуи йөкмәтке һалына. Үҙенең фольклорҙағы импровизация алымдарын файҙаланыуын ”һүҙ уйнатыу” тип атаһа, яҙма ижад итеүен ”фәсәхәт ҡаҙанында ҡайнау” тип исемләй. Фәсәхәт, белеүебеҙсә, урта быуаттар башында уҡ ғәрәп әҙәбиәт ғилемендә ентекле нигеҙләнгән ”матур теллелек” — әҙәби тел стилисти-

каһының бер сифатын аңлата, һәм ул әҙәби оҫталыҡ билдәһе итеп ҡарала. Әгәр ҙә тел-стиль йәһәтенән дә, функциональ яҡтан да, художестволы-эстетик йөкмәтке буйынса ла урта быуаттар дауамында икеһе ике ижад сфераһы булып сығыш яһаһа, Аҡмулла поэзияһы ауыҙ-тел һәм яҙма әҙәбиәттәргә хас сифаттарҙы туплаған үҙенсәлекле синтез рәүешендә һынлана. Аҡмулланың ижад итеү манераһы ла ике төрлө: телдән импровизатор булып сәсәндәр ярышында, әйтештәрҙә һүҙ һәм фекер оҫталығын күрһәтеү менән бергә, яҙма ижадты ла үҙ итә. Уның әҫәрҙәре шуға күрә халыҡ араһында телдән-телгә тапшырылып та, яҙмала күп һанлы күсермәләр рәүешендә киң тарала. Уның ижадына хас үрҙәге сифатты академик Ғ.Хөсәйенов "сәсәнлек-шағирлыҡ" тип нарыҡлай.

XIX быуат урталарында Баһауи, М.Ҡотош Ҡыпсаҡи шиғриәтендә халыҡ шиғыры нигеҙендә ойошҡан йыр һәм китап шиғыры үлсәмдәре һымаҡ күпмелер һыҙатланған сифаттар Аҡмулла ижадының төп тәбиғәтен билдәләй. "Быуаса башлыса йәнәш килгән халыҡ һәм китап шиғыры, — тип яҙа Ғ.Хөсәйенов, — был быуаттың һуңғы сирегендә Мифтахетдин Аҡмулла менән Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев ижадында үҙ-ара тығыҙ яҡынайыуға һәм берләшеүгә йөҙ тота"[11]. Осор яҙма поэзияһындағы был яңы күренеш "Аҡмулла строфаһы" тигән исем алып, артабан М.Ғафури, Ш.Бабич, С.Ҡудаш, Д.Юлтый һәм башҡа шағирҙар ижадында файҙаланылған. Шулай итеп, сәсән-шағир тип атау Аҡмулланың әҙәби фекеренең тәбиғәтен аңларға һәм аңлатырға ярҙам итә.

Аҡмулланың поэтик ижад тураһындағы уйланыуҙары, күҙәтеүҙәре айырым хеҙмәт һәм махсус әҫәр формаһын алмаған. Шулай ҙа уның әҙәби фекерҙәре теге йәки был уңай менән һәр әҫәрендә тип әйтерлек сағылыш таба. Мәҫәлән, бындай фекерҙәр тел феноменын аңлау-аңлатыуҙа ла сағыла. Тел, Аҡмулла яҙыуынса, әҙәми затҡа үҙ теләгенән һәм ихтыярынан тыш тәңре тарафынан бирелгән:

Бирҙең, тәңрем, телде беҙгә, һөйлә, тип...

"Йырау" циклында Алланан бирелгән телдең үтә камиллығы, уның универсаллеге һәм йәнле күренеш булыуы "ҡыҙыл тел" тигән билдәләмә аша тасуирлана:

Һөйәкте теүәл әйләне,
Ағзабыҙҙы тиң итеп;
Ун ике мөсә яратты,
"Һөйлә!" — тип әмер әйләне,
Һайраған ҡыҙыл тел биреп.

Тел, Аҡмулла раҫлауынса, һөйләшеүҙә, аралашыуҙа ғына йәшәй, сөнки фекер ебе бары телмәрҙә генә асыҡлана:

Һүҙҙәрҙең мәғәнәһе юҡ телең һаҡлап...

Шул уҡ ваҡытта аралашыу процесында телмәрҙе үҙеңә буйһондороу, телмәрҙең ебен ысҡындырмау — ҡыйын эш, "тел-ләпелдәк" әллә күпме кәрәкмәгән хәбәр һөйләп ташлауы бар. Ун бәләнең туғыҙы телдән тыуа, ғауға ла, дау-яу ҙа — шулар һөҙөмтәһе, тип иҫәпләй Аҡмулла. Телгә хужа булыу — ул егетлек, ғалимлыҡ билдәһе итеп баһаланырға лайыҡ һәләт. Телде насар белеүҙе шағир "телем сулаҡ", икенсе бер осраҡта "телем һаҡау" тигән метафорик һүҙбәйләнеш менән һүрәтләй. Әҫәр тексында автор, тыйнаҡлыҡ күрһәтеп, был ғибәрәне үҙенә ҡарата файҙалана. "Тел-

деҙ һаҡаулығы, сулаҡлығы” тигәнде автор күсерелгән мәғәнәлә, ”уйлағанды әйтеп еткерә алмау, кәрәкле һүҙ таба алмау” мәғәнәһендә ҡуллана. Телде аҡылға буйһондороп, яҡшылар яҡшы эш башлай:

Телде байҡап һөйләгеҙ аҡыл менән,
Эш башлайҙар яҡшылар яҡшы менән...
Аҡыллының кәңәше эстә торор,
Аҡылһыҙҙың үҙ һүҙе үҙен орор.

”Урынһыҙ ерҙә телде тыйыу, серҙе ситкә сығармау, алды-артты уйлап һәм үлсәп һөйләү” кеүек тыйыуҙар — яҙма әҙәбиәттә лә, халыҡ ижадында ла киң таралған мотив. Аҡмулланың ”Аҡыл” тип исемләнгән шиғырындағы был кәңәштәре, аралашыу мәсьәләһен күтәреп, үҙенәнүҙе яманлыҡ-яҡшылыҡ, наҙанлыҡ-аҡыллылыҡ мәсьәләләренә барып тоташа. Уныңса, күп һәм оҙаҡ һөйләү аҡыллылыҡ билдәһе түгел, киреһенсә, наҙанлыҡ һәм ахмаҡлыҡ, тәрбиәһеҙлек, йүнһеҙлек күрһәткесе. Ундайҙарҙан шағир инде тамам бүккән:

Ҡымыҙ эскән бәйгегә телен ҡушар,
Булыр-булмаç һүҙҙәргә ҡолаҡ тонор.
Ат туғарып керешкән сафсатанан
Кис булып, көн батҡанда һәрең боçор.

Аҡмулла былдай көн үткәреүселәрҙе, наҙандарҙы, ахмаҡтарҙы, буштан-бушҡа ”баш ярып, күҙ сығарып, дау даулашып” йөрөүселәрҙе ”һаңғырау” тип атай, улар үҙҙәре өсөн генә көн итә, шуға ла шағир хөкөмө аяуһыҙ:

Ахмаҡ дуçтан аҡыллы дошман артыҡ —
Ахмаҡ дуçтан һәр әҙәм яфа сигер...

Шағир үҙенең теләк-кәңәштәрен, ”ғилем һүҙе” тип атап, уны ”мәғрифәт тип, халыҡҡа файҙа эҙләүселәр” өсөн тәғәйенләй. Ғөмүмән, Аҡмулланың кеше, шәхес булараҡ бар теләге — аҡыл һәм ғилем дәрәжәһенән үҙенә тиңдәш заттар менән генә аралашыу. Мәçәлән, ”Ир аҙмаç” дүрт юллығында:

Һүҙеңдең ҡәҙерен белер шундай әҙәм —
Аҡылы аҡылыңа тиңдәш булһа, —

ти Аҡмулла.

Бәндәне бәхеткә илткән дә, бәләгә юлыҡтырған да, әҙәмде әҙәм иткән дә — тел тип, ”Моңло егет зарын әйтер” шиғырында Дауыт-Сөләймән пәйғәмбәрҙәр тормошонан бер легенданы тасуирлай Аҡмулла. Йөрәге һәм теле барҙың йәнен дә, тәнен дә һауыҡтырып була, тигән фекерҙе раçлай ул.

”Туған тел” төшөнсәһе лә билдәле Аҡмуллаға. Бер шиғырында ”ата теле” тигән һүҙбәйләнеш осрай, моғайын да, ул ”әсә теле” тигәнде алмаштырғандыр. Ата-әсә телен дауам итмәгән бала, уныңса, бер ниндәй маҡтауға лайыҡ түгел:

Баланың ниһен маҡтайһың —
Атаның телен алмаған...

”Туған тел” термины урынына ул йыш ҡына ”үҙ теле” тигән һүҙбәйләнеште ҡуллана:

Мәғәнәһен үҙ телендә төшөндөрһөн,
Вә илә ике яҡлап булыр иман...

Шағир фекеренсә, үҙ телендә белем алыу, телде белеү һәр кемдең киләсәген, именлеген гарантиялай:

Һөйләшерлек белем алып һәр бер баштан,
Бәләнән имен булыр телен баҡҡан.

"Йырау" исеме аҫтында тупланған шиғырҙар йыйылмаһының бер киҫәге бер яҡлы диалог формаһында яҙылған, һәм унда автор үҙенең Башына, Ҡарынына, Күҙенә, Ҡулына, Аяғына, Йәненә, Ғүмеренә, Эсенә һәм дә Тәненә өндәшә. Теленә ул, мәҫәлән, бик рәхмәтле:

Телем! Һөйгәнде яҙҙым —
Нәкел (тәржемә, ҡаршы һүҙ, ялған) һүҙҙе әйтмәнең!

Үҙенең уйлағанын, кисергәнен үҙе теләгәненсә, мәғәнәһен үҙгәртмәйенсә ҡағыҙға төшөрөргә мөмкинлек биргәне өсөн Аҡмулла үҙ Теленә оло хөрмәт менән ҡарай, уны үҙлегенән юғары ҡуя. "Тел" тип аталған бер генә строфа шиғырында "тел төбө" хаҡында һүҙ йөрөтә Аҡмулла:

Татлы телдең төбө шәрбәт, мөләйем,
Тибрәһен шул шәрбәт телем һәр даим.

"Тел төбөндәге шәрбәт" тигәндә, автор иң элек шиғриәтте күҙ уңында тота, сөнки ул үҙен башлыса шағир итеп иҫәпләй. "Шиғырҙар" китабына тупланған әҫәрҙәренең өстән ике өлөшөндә ("Дуҫлыҡ", "Инсафлыҡ", "Аҡыл", "Егетлек хәсиәте — мәғрифәттә", "Аһ, дәриға!..", "Нурғәли хәҙрәткә асыҡ хат", "Аҡмулланың һүҙе шул...", "Диуанамын", "Йырау", "Моңло егет зарын әйтер", "Кәңәш", "Булмаған") Аҡмулла әйтер һүҙенең эйәһе — шағир булараҡ сығыш яһай. Мәҫәлән, "Дуҫлыҡ" һәм "Булмаған" әҫәрҙәренең аҙағында автор үҙе хаҡында "Ижад итеүсе — мөләҡҡаб (ҡушаматлы) дәрдмәнд Аҡмуллағыҙ" тигән мәғлүмәт бирһә, "Кәңәш"тә:

Һүҙ һөйлә бер аҙыраҡ, юл ҡыҫҡарһын,
Ҡәләм дә, ирек барҙа, ҡулға оҫтарһын...
Таралып йорт өҫтөндә китәр телең, —

ти. Ә инде "Егетлек хәсиәте — мәғрифәттә", "Диуанамын", "Йырау", "Ҡарағыҙ Барлыбайға" һәм башҡа әҫәрҙәрендә ул "һүҙҙе ҡағыҙға төшөрөүен", "хәлен аҡҡа һалыуын", "ҡәләм йүгертеүен" белдерә. "Диуанамын", "кәмселегем билдәле ҡәләмемдән, юнһеҙлегем билдәле кәламемдән (һүҙемдән)" тип, үҙен шағир булараҡ кесерәйтеп ҙурайтһа, Мәржәнигә бағышлап яҙылған мәрҫиәһендә һәм Нурғәли хәҙрәткә төбәлгән асыҡ хатында ул ғәйрәте ташып торған һүҙ оҫтаһы — көрәшсе рәүешендә күҙаллана:

Нурғәли, ҡурҡты, тип, булма алаң,
Әгәр һин таяҡ алһаң, мин уҡ алам.
Башым минең иҫән торһа, китап — ҡулда,
Әгәр һин мылтыҡ алһаң, мин туп алам!..

Шағир һүҙенең илаһи көсө һәм тәьҫир итеү дәрәжәһе үлемесле ҡоралдан да ҙурыраҡ, тип һүрәтләй Аҡмулла.

Мәрҫиәнең дүртенсе бүлеге тотошлайы "шағирлыҡ", "һүҙ оҫталығы" мәсьәләләренә арналған һәм унда яҙылғандар авторҙың үҙ ҡараштарын тулыраҡ сағылдыра. "Ниндәй кеше шағир була?" тигән һорау тормай Аҡмулла алдында. Шағирлыҡ өсөн дәрд әһеле, дәрдмәнд булыу шарт. Дәрд — фарсы һүҙе булып, мәғәнәһе "ауыртыныу, ғазапланыу, һыҙланыу" тигәнгә тап килә[12]. Әммә һүҙ был осраҡта тән йәрәхәттәре хаҡында

бармай, ”дәрд” иң элек йән аҙаптарын, күңел төшөнкөлөгөн сағылдырған символик атама рәүешендә нығынған яҙма әҙәбиәттә. Суфизмда ”дәрд” төп терминдарҙан һанала һәм уны алла менән тиҙерәк ҡауышыу өсөн ғазапланған суфыйҙың теләп алған күңел халәте тип әйтергә мөмкин. (Башҡорт телендә ”дәртле”, киреһенсә, ыңғай мәғәнәлә, энергияһы ташып, көс-ҡеүәте урғылып торған халәтте тасуирлау өсөн ҡулланыла.) Был һүҙ менән бер үк бәйләнештә йөрөгән ”дарман” һүҙе лә фарсынан ингән һәм ул ”дауа, сара” тигәнде аңлата. Суфыйҙың дәрденә, йәғни илаһи ғашиҡтың күңел ғазаптарына дарманы (дауаһы) — ул алла менән ҡауышыу. ”Тиһеңме?” шиғырынан аңлашылыуынса, Аҡмулла ла ”дәрд-дарман” бәйләнешен тап шулай аңлай:

Хаҡтан башҡа дәртеңә
Дарман булыр тиһеңме?..

Аҡмулланың шиғырҙарында, мәҫәлән, ”Аһ, дәриға!..” әҫәрендә, дәрдмәндлек шағирлыҡтың тәү шарты итеп тә һүрәтләнә:

Дәрдмәндтәр шағир булмай, эс бошмаһа,
Дин дәрте ташып сығып, эш бешмәһә.
Йөрәгенең саҡмаһы сағылғанда,
Үпкәһенең ҡеүәтенә ут төшмәһә!

Йыш ҡына Аҡмулла ”дәрд” мәғәнәһендә ”моң”, ”зар” һүҙҙәрен дә ҡуллана, ғөмүмән, шиғыр ижад итеүен ул кинәйәле итеп, ”моңло егет зарын әйтеүе”, ”аҫылдарға моңоңдо әйтеү” тип тә аңлата. Ул үҙенең ижад процесын ”Аҡмулланың һүҙе шул...” әҫәрендә бик образлы итеп һүрәтләй:

Һәр нәмәгә моң булып ғүмерем үтте...
Күңел дәрте ҡуҙғалып, тышҡа сыҡты,
Тулған һуң сыҙатманы эстә ятыу.

Үҙ шиғриәтенең тәьҫир көсөн дә, әһәмиәтен дә ул яҡшы күҙаллай, шул уҡ ваҡытта тыйнаҡлыҡ та күрһәтә:

Ҡараһаң, Аҡмулланың диуаны был,
Эсендә — һыуһағанға шәрбәтле һыу.
Битенең бере көләр, бере һүгер,
Тура һүҙе — берәүгә им, берәүгә — ыу.
Иҫтәлек булмаҫмы тип яҙған булдыҡ,
Хата булһа, ярлыҡарһыҙ, йә аллаһу.

Һуңғы ике юллыҡты урта быуаттарҙан алып ҡулъяҙманан-ҡулъяҙмаға күсеп йөрөгән ”шағирлыҡ этикетының” бер үрнәге тип тә ҡарарға мөмкин. Боронғо авторҙарҙың үҙҙәрен атамайынса ғына йәиһә үтә кесерәйтеп ”ҡол Ғәли”, ”мәүлә ҡоло” кеүегерәк ”бән зәғифең, мәжнүн, ғәриб” аныҡлаусылары менән генә танытыу традицияһы Аҡмулла ижадында ла күҙәтелә. Тыйнаҡлыҡ — аҡыллылыҡ билгеһе, тип иҫәпләй шағир. Нурғоч аҡын менән әйтешендә был хаҡта ул шағирлыҡ даны сыҡҡан һәм ”ынйыға мәрйен менән һыу йоғамын” тип маҡтанып ултырған ҡаҙаҡ аҡынының йөҙөнә бәреп әйтә:

Аҡыллы әҙәм хуш күрер, фәҡир, тиһә,
Ахмаҡ кеше маҡтаныр, батыр, тиһә,
Гәүһәр, тип, үҙеңде-үҙең мәдехләйһең,
Ғалимдар танылалыр, егет, тиһә...

Аҡмулла шиғырҙарында үҙен төрлөсә атай: ”наҙандарҙың береһе мин, фәрештә затынан түгел беҙҙең ҡатар, диуанамын, Аҡмулла тигән байғош, был әсирең, мин — буҙ бала, беҙҙәй ғәриб, аҡылһыҙ диуанабыҙ, дәрдмәнд, бер тотҡон, мин бисара, мосафир Аҡмулла, мин — таҙ эт, фәҡир Аҡмулла” һ.б. Әммә унының үҙен түбәнәйтеүе — ул поэтик традиция, асылда, шағир һүҙенең ысын ҡиммәтен бик яҡшы белә:

Үҙемде эт, дуңғыҙға хисап итһәм —
Үҙемде ул ваҡытта маҡтағаным.
Ризамын, инсаф ҡылып ҡараһағыҙ —
Беҙ, байғош, бөйөктәрҙән алашабыҙ.
Кесерәйтһәгеҙ, кесерәйергә мин яраймын,
Үҙегеҙ ҙурайырға яраһағыҙ.

Бөйөктәрҙән алаша — Аҡмулланың үҙ-үҙенә биргән баһаһы. Ул үҙен ирекле ижадсы итеп тоя, ”һөйгәнде, теләгәнде” яҙҙырған өсөн күңелендә үҙ теленә оло рәхмәт йөрөтә. Аҡмулла үҙен ололауҙы, хөрмәтләүҙе көтөп кенә ултыра торған заттан түгел, ул — көрәшсе натура, хаҡлыҡ, ғәҙеллек, тигеҙлек, шәфҡәтлелек, инсафлыҡ, һәр берәүҙең бәхетле тормошҡа, мул һәм тыныс йәшәүгә хоҡуҡлы икәнен раҫлау һағында тора шағир.

Атаҡлы мәрҫиәһенең дүртенсе бүлегендә Аҡмулла, үҙенән алда йәшәгән атаҡлы шағирҙарҙың ғүмер юлдарына һәм ижадтарының айышына күҙ ташлап, ысын шағирлыҡҡа хас сифаттарҙы барлап сыға.

Берҙән, шағирҙар, хикмәтле, тәрән мәғәнәле һүҙҙәр, аҡылға күндереүсе нәсихәттәр, вәғәз менән фәһемле ғибрәттәр һөйләр; иман һәм әҙәп таратыр. Икенсенән, улар — оҫта оратор, әҫәрҙәрен тәьҫирле итеп, тыңлаусыларҙы илатырлыҡ, ҡатҡан күңелдәрен иретерлек итеп башҡара белергә бурыслы. Өсөнсөнән, һүҙ оҫтаһы булыу өҫтөнә — дәрт әһеле, күңел хистәре ташып торған, уй-тойғоға бай, үҙен ”малик-батшалай” ирекле итеп тойған, үҙ-үҙенә хужа — ”әһле салик”, үҙ фекере, үҙ ҡараштары формалашҡан, теләһә ниндәй шарттарҙа ла тура һүҙ әйтерлек батыр шәхес. Дүртенсенән, ул — дин ғилемен һәм шәриғәтте яҡшы белер, дин ҡушҡанса тормош алып барыр, динде хөрмәтләр һәм гел генә дөрөҫтө, хәҡиҡәтте һөйләр уҡымышлы, һүҙе эшенән айырылмаған әҙәп — әхлаҡлы зат. Бишенсенән, шағир булған зат — ул ысын ир-егет, илгә һәм халыҡҡа файҙа уйлар һәм халыҡтың аңын үҙгәртеп, рухын байытыр өсөн ихлас күңелдән тырышып хеҙмәт итер, белем һәм ғилем таратыр. Алтынсынан, холҡофиғеленә ҡарап яҡшыны ямандан, зауыҡлыны зауыҡһыҙҙан, аҡыллыны ахмаҡтан, шоңҡарҙы ҡарғанан айыра белер, улар менән дөрөҫ мөнәсәбәттәр ҡорорға тырышыр. Етенсенән, уның күңелендә хоҙай биргән ”фәсахат, әс-сәмге әл-кәлим” (рифмалашҡан матур һүҙҙәргә һәләт) талант булырға тейеш. Шулар булғанда, һис бер тәнҡитсенән, яман һүҙҙәрҙән өркмәйенсә, үҙ дәрәжәңде белеп, ижадҡа тотонорға мөмкин.

”Бәхет” тип исемләнгән шиғырында шағирҙарға ла ҡағылышлы ”дан, дәрәжә, ҙурлыҡ” мәсьәләһенә Аҡмулла икенсе күҙлектән ҡарарға мәжбүр итә.

Үҙ башыңды ҙур итеп,
Тиңдәш ҡайҙан табырһың? —

тигән риторик һорауы менән Аҡмулла йәмғиәттәге йәшәү принциптарының асылына ишаралай. Бәхет, шағир раҫлауынса, үҙ-үҙеңде ҙурға ҡуйып, бер үҙең ҡуҡырайып ултырыуҙа түгел, ә тиң һәм ихлас мөнәсәбәттәр нигеҙендә бергәләшеп йәшәүҙә икән. Үҙ заманынан башлап үҙ йортоңа — ҡан ҡәрҙәштәреңә тиклем яманға сығарыу, бар донъяны ҡара буяуҙарға мансыу — кешемен тигән кешегә, айырыуса шағирҙарға хас эш түгел:

Эскән һыуың яманлап,
Йофар ҡайҙан табырһың,
Алған йәрең яманлап,
Матурын ҡайҙан алырһың,
Хакимыңды яманлап,
Ғәҙел ҡайҙан табырһың?..

Йәшәүҙең мәғәнәһен юҡҡа әйләндереү, тормошто инҡар итеү урынына, киреһенсә, йәшәүҙән йәм һәм ғәм табып, үҙ тормошоңдо үҙең матурлап уҙғарыуҙа күрә бәхетте Аҡмулла. Ул бында быуындар бәйләнешенең мөһимлеген, рухи күсәгилешлектең әһәмиәтен тәрәндән аңлаған, ҡыҫҡаһы, тарихи ҡарашҡа эйә зат булараҡ та сығыш яһай:

Ҡарыларың яманлап,
Кәңәш ҡайҙан алырһың?

Ысынбарлыҡты барлыҡ реаллегендә һәм ҡатмарлылығында ҡабул итеү һәм уны ижадта барлыҡ дөрөҫлөгөндә тәрән аҡыл менән һүрәтләү — был ижади принцип Аҡмулла йәшәгән XIX быуат аҙағындағы яҙыусылар өсөн, хатта бөгөнгө ижадсылар өсөн дә ифрат актуаль булып ҡала. Аҡмулла үҙенең ижадын ”берсә көлөп, берсә һүгеп” тура һүҙ әйтеү тип баһалаһа, ысынбарлыҡты боҙоп күрһәтеүгә иһә ҡырҡа ҡаршы сыға. Нурғоч аҡын менән әйтешендә ул, берҙән, уны гәзиттәргә яһап яҙып, ”редакторға пособлять ҡылыуҙа” ғәйепләһә, икенсенән, ”өләңгә тәхфиф ҡылып айәт яҙыуҙа”, һүҙ ҡомартҡыһының тексын боҙоуҙа, көлкөгә әйләндереүҙә хәсислек күрә.

Дан, исем мәсьәләһенә килгәндә, шағир уларҙың нигеҙендә лә һәр кемдең үҙ осоронда, үҙ замандаштары араһында күрһәткән реаль эштәре ятҡанлығын һыҙыҡ өҫтөнә ала:

Артыңда ҡалыр атаҡ юҡ,
Терелә даның булмаһа.

Аҡмулланың һүҙ оҫталығы, сәсәнлек хаҡындағы фекерҙәре ҡаҙаҡ аҡыны Зинда менән әйтешендә аныҡыраҡ төҫмөрләнә. ”Сәсәндең асылыр, йөрһә, бағы” тип яҙа икән, тимәк, сәсәндең сәсәнлеге гелән юл йөрөп, ил гиҙеп, халыҡ менән туранан-тура аралашыуҙа асыҡлана. Әммә оҫтамын тип, осраған берәүгә, йөрөгән һәр бер ерҙә һүҙ һөйләү сәсән һүҙенең ҡәҙерен һәм бәҫен төшөрөр. Унынса, ”баштан ашыр ғашиҡ — инҡәр” булғанда ғына, күңел килгәндә генә шиғыр тыуа. Ә инде ”наҙ” тигәндә, ”моң булғанда”, ”наҙ ҡылғанда” ғына тел осонан яҡшы һәм тәьҫирле йылы һүҙҙәр тама.

Сәсәнлек, данға һәм шөһрәткә күмгән хәлдә лә, бар белгән-күргәнде бәйнә-бәйнә һөйләп, илгә таратырға хоҡуҡ бирмәй әле, һүҙҙең кәрәген

һәм урынын белеп, самалап һәм әҙәп һаҡлап һөйләү генә хөрмәткә лайыҡ, тип иҫәпләй Аҡмулла. Быны ул исеме ҡаҙаҡ далаларында киң билдәле мәшһүр Зинданың йөҙөнә ҡарап белдерә, тегеһе уйынды ысынға әйләндереп, һүҙ көрәштереүҙе йөҙ йыртыуға бора башлағас:

Аҡынды һөйләштерер тел һәм яғы...
Самаһын белә алмайһың күп һәм аҙҙың,
Аҡылы эскә һыймай юмахайҙың.
Оялмай быны нигә ятҡа һалдың,
Ғәйепте пәйғәмбәр ҙә белә алмаған,
Үҙеңә үҙең тәрән ҡоҙоҡ ҡаҙҙың...
Аҡынлыҡ атың сыҡҡан әүүәл баштан,
Сереңдең барын әйтмәй, һөйлә һаҡлап.

Байрамға йыйылған ҡунаҡтарҙың үтенесен йыҡмаҫ өсөн генә әйтештә ҡатнашырға ризалыҡ биргән Аҡмулланың ниәте, форсаттан файҙаланып, хөрмәт йөҙөнән Зинда аҡындың оҫталығын маҡтау, башҡалар алдында данлау була. Атаһы менән уның мөнәсәбәттәренә ҡағылыуҙы, үҙенең иң ауыртҡан еренә төрттөрөүҙе сәсән өсөн түбәнлек, әҙәпһеҙлек тип баһалай Аҡмулла.

Мин йүгерек һүҙҙе баштан айырмайым,
Итемә ҡамсы теймәй асынмаймын, —

тип, шағир-сәсән үҙенә һәм һүҙенә баш булыуына, күңелдәгеһен аҡылға буйһондора алыуына ишаралай.

Ғөмүмән, һүҙ һәм аҡылдың, аҡыл менән белемдең айырылғыһыҙ бәйләнештә тороуы Аҡмулланың һәр шиғырында тиерлек һыҙыҡ өҫтөнә алына. Кешеләрсә йәшәү өсөн аҡылдың мөһимлеген таныу, аҡылға дан йырлау шағирҙың ижадында даими ҡабатлана торған төп мотивтыр, моғайын. "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!" тигән оран ташлап, Аҡмулла халыҡты аҡыл туплауға, аң-белемгә эйә булырға саҡыра. "Һүҙ — иҫкән ел, күңел — даръя, аҡыл — гәүһәр", ти шағир. Аҡыл һәр кемгә йәмғиәттә һәм кешеләр араһында дөрөҫ мөнәсәбәттәр булдырыуға, донъяла үҙ урынын табыуға хеҙмәт итһә, белем һәм һөнәр көндәлек йәшәйештә бәхетле тормош ҡороу өсөн кәрәк:

Ырыҫ, дәүләт шишмәһен асам тиһәң,
Ғилем-һөнәр бирҙән-бер әмәл булыр.

Аҡмулланың "Аҡыл" тип баш ҡуйылған әҫәре бик фәһемле юлдар менән тамамлана:

Мәғрифәт, тип, халыҡҡа файҙа эҙләп,
Йән бармы ғилем һүҙҙе ауыҙына алыр?

Ғилем һүҙ — асылда Аҡмулланың шағир һүҙе ул. Уның был риторик һорауында ниндәйҙер икеләнеү, алдағыға өмөтһөҙлөк яңғыраған һымаҡ. Ләкин ул юҡҡа борсолған: шағирҙың барлыҡ нәсихәт-кәңәштәре, ғибрәтле һығымталары эҙһеҙ юғалмай, халыҡ күңеленә төшөп, ғилемгә ынтылыш булып шытып сыға. Уның яҡтылыҡҡа, изгелеккә, аң-белемгә өндәүҙәрен ваҡытында уҡ объектив баһалап, халыҡ "аҡ мулла" тип исем-дәрәжә бирә.

Башҡорт әҙәби фекер тарихында Аҡмулла үҙенә башҡа бер урынды биләй. Ул сәсәнлектең һәм шағирлыҡтың тәбиғәтен айырып ҡараһа ла, үҙенең ижадында ике башланғысты ла органик берләштереүгә

өлгәшә. Уның ғилем һүҙе әйтеүе һәм оҫта итеп ҡисса яҙыуы — бер-береһенән айырылғыһыҙ процесс. Һүҙ оҫталығы мәсьәләләрен философия юғарылығынан аң, донъяны танып белеү ҡеүәһенә бәйләп аңлата, шул уҡ ваҡытта күп фекерҙәрен "халыҡта шулай тиҙәр" формаһында халыҡ аҡылына һылтана. Әҙәби ижадҡа арналған махсус хеҙмәт яҙмаһа ла, был хаҡтағы уйҙары уның әҫәрҙәрендә даими сағылыш таба. Ғәрәп-фарсы поэтикаһы нигеҙендә формалашҡан яҙма әҙәбиәт һәм халыҡ ижадының практик тәжрибәһе һөҙөмтәһендә нығынған ауыҙ-тел әҙәбиәте быға тиклем халыҡтың фольклор ижады менән ауыҙ-тел әҙәбиәте бер йүнәлештә, ә яҙма әҙәбиәт икенсерәк йүнәлештә үҫешһә, Аҡмулла уларҙы ижади берләштерә; төрки телендәге ауыр яҙманы халыҡтың һөйләү теленә яҡынлаштырып, киң массаларға ла аңлайышлы итә.

Үҙенән алда ижад иткәндәр шикелле, урта быуаттарҙан килгән традицияларҙы дауам итеүҙә генә күрмәй әҙип шағирлыҡты. Әҙер сюжеттарға, әҙер образдарға нәзирә йә шәрех яҙыу өсөн ваҡыт әрәм итмәй, ысынбарлыҡта булған хәл-ваҡиғаларҙы, үҙенең реаль кисерештәрен ҡағыҙ биттәренә төшөрә. Аҡмулланың үҙенә ҡағылышлы, автобиографик характерҙағы яҙмалар сифатында, йөрәктән сыҡҡан үҙ һүҙҙәре кеүек ҡабул ителгәнгә күрәлер ҙә, уларҙың эмоциональ тәьҫир итеү көсө һаман да кәмемәй, хәҙерге заман уҡыусыһын да битараф ҡалдырмай. Йәнә шул: Аҡмулла шиғриәтендә әҙәби форма иң тәүҙә әҙәби-эстетик йөкмәткене асыу өсөн хеҙмәт итә. Уның теге йәки был конкрет шәхескә төбәлгән хаттары шәхси үтенес түгел, ә башҡалар уҡыһынбелһен өсөн тәғәйенләнгән анығ мөрәжәғәт. Ҡөҙрәтле көскә эйә һүҙ менән ҡоралланып, кәмһетелгән-ҡыйырһытылғандарҙы яҡлау өсөн ғәҙеллек, ғилем-иман, яҡшы әҙәп-әхлаҡ һағына баҫҡан шағир итеп һүрәтләнә Аҡмулла — автор образы. Ул йыш ҡына үҙ исеменән шәхсән түгел, ә халыҡ йә уҡымышлылар, йәмғиәтселек исеменән сығыш яһарлыҡ оло шәхес, гражданин булып һынлана. Өлгөр һүҙ, тура һүҙ, күңел иретерлек йә, киреһенсә, уҡтай үткер һүҙ — бына уның ижад ҡоралы. Мөхәббәт ҡаҙанында ҡайнап бешкән, һәр йәһәттән камиллыҡҡа ирешкән, гел хәрәкәттә һәм юлда йөрөп, тормош тәжрибәһен туплаған зат ул шағир.

Шиғриәттең асылы, Аҡмулла фекеренсә, уның эстетик тәғәйенләнешендә: кешеләрҙең рухын тәрбиәләү, аҡылын үҫтереү, "эс паклау", күңел бушатыу, эс бошоуын дауалау. Шиғриәттең йөкмәткеһе ниҙәр хаҡында булырға, нисегерәк яҙылырға тейешлеге, йәғни художестволы йөкмәтке һәм художестволы форма берлеге буйынса ла үҙенсә һүҙ ҡуҙғата сәсән-шағир.

Шулай итеп, Аҡмулла ижады миҫалында XIX быуаттың аҙағында башҡорт әҙәби фекеренең милли ерлектә өлгөрөп етеүе раҫлана. Уның шиғыр һәм "ғилем һүҙ" мәсьәләләренә ҡағылышлы ҡараштары шаҡтай төҙөк бер системаны хасил итә һәм башҡорт әҙәби фекере үҫешендә ғәрәп-фарсы һәм дөйөм төрки поэтикаһынан ярайһы айырымланған үҙаллы яңы бер этап булып тора. Шағирҙың әҙәби фекерҙәренең үҙенсәлекле сағылышы булараҡ, телдән дә, яҙма ла ижады үҙе бер Аҡмулла мәктәбен, поэтик ижад мәктәбен тыуҙыра. "Унан һуң әҙәбиәткә килгән F.Туҡай,

М.Ғафури, Д.Юлтый, Ш.Бабич, Ш.Әминев, Н.Йомрани кеүек бик күп шағирҙар, — тип яҙа Ә.Вилданов, — тәүге һабаҡты шул мәктәптә алдылар”.[13]

XIX быуаттың аҙаҡтарын иһә башҡорт әҙәби фекеренең үҙенсәлекле һынылыш этабы тип ҡарарға мөмкин. Кантонлыҡ идараһы бөтөрөлөп, крайҙа социаль-иҡтисади шарттарҙың үҙгәреүе, милли уҡыу йорттарында уҡытыуҙағы яңылыҡтар әҙәби фекерҙең торғонлоҡтан, догмаға әйләнгән ҡанун талаптарынан арынырға булышлыҡ итә. Ғ.Соҡоройҙоң, Аҡмулланың ижады ҡараштарының сағыштырмаса азатлығы һәм үҙаллылығы уларҙың әҫәрҙәрендә даими сағыла. Аҡмулла тарафынан шиғри һүҙ бәҫе, уның төрҙәре, шағир һүҙенең әһәмиәте хаҡында фекерҙәр белдереүе авторлыҡ үҙаңдың юғары кимәлен күрһәтә. Уның әҫәрҙәре — халыҡтың ауыҙ-тел ижады алымдары һәм яҙма әҙәби традицияларҙың органик берләшеүе һөҙөмтәһе. Аҡмулланың шиғриәтендә формаль күрһәткестәр традиционлыҡ һыҙаттары һымаҡ ҡабул ителһә лә, әҙәби-эстетик йөкмәткеләрендәге конкретлыҡ, тормош менән бәйләнеш тығыҙлығы, фекер хөрлөгө уға ысын мәғәнәһендә новаторлыҡ төҫө бирә. Урта быуаттарҙа популяр поэтик эйәреүҙәр, нәзирәләр урынына Аҡмулла үҙ шиғыр үлсәмдәрен тыуҙырырлыҡ әҙәби фекер туплай. Сәсәнлек һәм шағирлыҡ сифаттарын бергә туплаған Аҡмулланың әҙәби фекере башҡорт әҙәбиәтенең яңы көстәрен уята. Ижадсылар араһында тәү башлап Аҡмулла үҙен ирекле һүҙ оҫтаһы, үҙе теләгәнен яҙған һәм йәмғиәтселек исеменән сығыш яһарлыҡ азат шағир итеп иғлан итеәә. Шулай итеп, Мифтахетдин Аҡмулла профессиональ ижадҡа юл һала.

### Ҡулланылған әҙәбиәт


[1] Шафиков Г. Белый сокол башкирской поэзии // Дыхание жгучее истории. Уфа: Китап, 1998. 24-се бит.

[2] Вильданов А.Х., Кунафин Г.С. Башкирские просветители-демократы XIX века. М., Наука, 1981. 225-се бит.

[3] Ғилми архив, ф.3, оп.63, ҡ.б. 47... 24-се бит.

[4] Насыров И. Духовный отец нации // Ватандаш, 1998, №9. 119-сы бит.

[5] Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Хәтирәләр. Өфө: Китап, 1996. 55-се бит.

[6] Юсупов М.Х. Ш.Марджани как историк. Казань: ТКН, 1981. 213-сө бит.

[7] Башҡорт халыҡ ижады. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр. Өфө: БКН, 1980. 266-сы бит.

[8] Роузентал Ф. Торжество знания. М., Наука, 1978. 51-се бит.

[9] Валеев Д.Ж. История башкирской философской и общественно-политической мысли. Уфа: Китап, 2001. 133—136-сы биттәр.

[10] ”Шура”. Ырымбур, 1911, №23, 713-сө бит.

[11] Хөсәйенов Ғ. Башҡорт шиғыры. Шиғриәт һүҙлеге. Өфө: Ғилем, 2003. 209-сы бит.

[12] Миллер Б.В. Персидско-русский словарь. М., 1953. 213-сө бит.

[13] Вилданов Ә. Мәғрифәт, яҡтылыҡ йырсыһы //Аҡмулла. Шиғырҙар. Өфө: БКН, 1981. 38-се бит.